Тема:

# М.Кәримдең «Урманда» хикәйәһен өйрәнеү

Максат:

Хикәйәнең йөкмәткеһе менән таныштырыу, уны үҙләштереү; телмәр һәләтлектәрен, фекерләүҙе үҫтереү, башкорт өндәренең әйтелешен камиллаштырыу; тәбиғәткә һаксыл караш тәрбиәләү.

Йыһазландырыу:

2 кл. әсән дәреслек, урман һүрәте, маскалар.

Дәрес барышы

I. Ойоштороу моменты

— Дәресте шиғыр менән башлап ебәрәйек.

Дөрөҫ итеп ултырҙык Дәрес
башлана хәҙер Укытыусыны
тыңларға Беҙ һәр вакыт әҙер

II. Дәрестең максатын әйтеү

— Бөгөн дәрестә М. Кәримдең "Урманда" хикәйәһе менән танышасакбыҙ һәм һөйләү телмәре өҫтөндә эшләйәсәкбеҙ.

III. Динамик күнегеүҙәр эшләү

— Дәресте динамик күнегеүҙәрҙән башлап ебәрәйек.

1) Тын юлына күнегеүҙәр.

— паравоз геүелдәй — ү-ү-ү

— йылан ыҫылдай — ҫ-ҫ-ҫ

— эҫе сәйҙе өрөп һыуытабыҙ — өф-өф-өф

2) Фонетик зарядка

— бала нисек илай — ңә-ңә

—һөттө нисек эсә - ыңк-ыңк

—себен осканды "ҙ" өнө менән әйтәйек — ҙ-ҙ-ҙ

—һыйырҙы нисек сакырабыҙ — һәү-һәү

—бала теле асылғанда ағаһына кем тип өндәшә

3) Телдәргә күнегеүҙәр

—түбә буяу

—тештәрҙе таҙартыу

—телдәрҙе тукмау

—телде сапкылау

—аттар килә

4) Иренгә күнегеүҙәр

—ирендәрҙе алға-артка, алға-артка, алға-артка

—уңға-һулға, уңға-һулға, уңға-һулға

5) 6 рычаг буйынса укытыу Т - Г В - Н Б - М

—Ки-ки-ри-күк,
Тороғоҙ иртүк.
Ға-ға-ға,
Киттек йылғаға.

6) Маскалар менән эш

—3 һөйләм төҙөгөҙ:

- Бөгөн минең тыуған көнөм
- Тышта ямғыр яуа
- Кояш сыкты

IV. Өйгә эште тикшереү

— Өйҙә М.Ғафуриҙың «Болон» шиғырын тасуири укырға әҙерлә неп килергә тейеш инегеҙ. Әйҙәгеҙ әле тикшереп алайык (184-се бит)

Темаға инеш әңгәмә

— Балалар, иғтибар менән такталағы һүрәткә карағыҙ, һеҙ нимәләр күрәһегеҙ? (ағастар, үләндәр, сәскәләр, бәшмәктәр)

— Улар кайҙа үҫәләр? (акланда, урманда)

— Мин һеҙгә йомактар әйтәм, ә һеҙ уларҙың яуаптарын сисегеҙ.

1. Көҙ сисенә, яҙ кейенә
Йә, әйтеп кара, нимә? (Ағас)
2. Ак кейем кейгән,

Йәшел суғын элгән. (Кайын)

3. Кышын да, йәйен дә йәм-йәшел. (Шыршы)

4. Олоһо ла, кесеһе лә
Эшләпә кейгән. (Бәшмәк)
5. Үләндәрҙә кыҙарып бешер, һабағын

бөгөп ергә төшөр. (Еләк)

6. Йәйен һалкын бирә,
Күҙөн ашата,
1-Сышын йылыта. (Урман)

— Балалар, ә һеҙҙең урманда булғанығыҙ бармы?

— һеҙ унда кем менән барҙығыҙ?

— Нимәләр эшләнегеҙ?

— Кешеләр урманға ял итер әсән генә лә баралар. Улар палаткалар коралар, костер яғалар, табын короп ултыралар. Ә һуңынан ошо костерҙарын һүндереп тә тормайынса, ултырған урындарын йыйыштырмайса машиналарына ултыралар ҙа кайтып китәләр. Быйдай кешеләр тәбиғәтте бысраталар. Улар һүндермәй киткән костерҙан янғын сығыуы ихтимал. Шуның әсән кайҙа барһағыҙ ҙа, артығыҙҙан костерҙы һүндереп, сүп-сарҙы калдырмайынса йыйыштырырға кәрәк.

"Урманда" хикәйәһе менән танышыу

1) һүҙлек эше (дәфтәргә яҙыу)

эшләпә — шляпа
ғүмер — жизнь
бәшмәк — гриб
как — пастила
баҙнат итеү — осмелиться
яй ғына — медленно

2) Укытыусының укыуы

3) Һорауҙарға яуап биреү:

— хикәйәләге вакиғалар касан булған? (Йәй көнө)

— Урманда ниндәй сәскәләр үҫә? (Кыҙыл, ак, зәңгәр)

— Сәскә ниңә илап ебәрә? (Әлфиә уны өҙөргә теләй)

— СӘСКӘ ниндәй һүҙҙәр менән илай? Табып укығыҙ

— Сәскәне калдырғас, Әлфиә нимә йыйырға уйлай? (БӘШМӘК)

— Әлфиә менән бәшмәк кыҙы араһында ниндәй һөйләшеү була?

Табып укығыҙ

— Бәшмәкте калдырып ул кайҙа китә? (ТСайтырға борола)

— Ул кайҙа барып сыға? (Акланға)

— Унда нимәләр үҫкән була? (Еләктәр)

— 1Сыҙ уларҙы өҙөргә уйлаймы? (Юк)

— Еләктәр ни әсән үҙҙәрен Әлфиәнән йыйырға һорағандар?

— Улар кыҙға нимә тип өндәшәләр? Табып укығыҙ.

4) Сылбырлап укыу

5) Һорау:

— Хикәйәгә нисә һүрәт эшләп була?

1. Урманды һүрәтләгән
2. Әлфиәнең урманға килеүе
3. Сәскәләр менән һөйләшеүе
4. Бәшмәк менән һөйләшеүе
5. Еләк менән һөйләшеүе
6. Еләк йыйыуы
7. Кәрзинәһен күтәреп өйөнә кайтып китеүе

Ял минуты 6) Хикәйәне

роллэп укыу

- автор
- сәскә
- бәшмәк
- еләк

VII. Күнегеү эшләү (186-сы бит)

147-се күнегеү (вариантлап эшләү)

1. Кыш айҙары:
2. Яҙ айҙары:
3. Йәй айҙары:
4. Көҙ айҙары:

152-се күнегеү (телдән) һорауҙарға

яуап бирегеҙ

— Аҙнала нисә көн бар? (7)

— һанап сығығыҙ

— Бөгөн ниндәй көн?

— Кайһы көндө һеҙ ял итәһегеҙ?

— Йәкшәмбе көндө һин нимәләр эшләнең?

VIII. Йомғаклау

— Балалар, бөгөн дәрестә беҙ ниндәй хикәйә менән таныштык?

(«Урманда» хикәйәhе)

Хикәйәне укығандан hуң heҙ нимәләр белдегеҙ?

— Эйе, сәскәләрҙе тиккә, кәрәкмәгәнгә өҙөргә ярамай. Бәшмәктәрҙе төбө, тамыры менән йолкмаҫка, уларҙы матур итеп, бысак менән кыркып алырға, ағастарҙы hындырмаҫка, дөйөм әйткәндә, тәбиғәтте hакларға кәрәк.

IX. Баhалау

X. Өйгә эш

— Хикәйәнең йөкмәткеhен hөйләргә әҙерләнергә.

— Ошо хикәйә буйынса бер hүрәт төшөрөргә.